***Мөнир ҠУНАФИН***

# Киләсәк бында башлана

*«Беҙ, табындар, һан яғынан һәм нәҫел-ырыу яғынан башҡорттар араһында иң ишлеһе. Ҡәбиләбеҙ алты нәҫелдән тора: табындар, һырҙылар, ҡыуаҡандар, бишулдар, бәҙрәктәр һәм ҡурмыҡтар. Ағасыбыҙ — ҡарағас, ҡошобоҙ — ҡарағош, оранбыҙ — салауат, тамғаларыбыҙ бик күп. Иң ныҡ таралғандары сүмес, ҡаҙаяҡ, ҡабырға, һәнәк, туҫтаҡ, дүңгәләк һ.б.*

*Шәжәрәбеҙ Майҡы бейгә барып тоташа. Ырыуыбыҙҙа арҙаҡлы шәхестәр күп. Мәҫәлән, Мәжит Ғафури, Ғайса Хөсәйенов, Жәлил Кейекбаев, хатта Дауыт Юлтыйҙың шәжәрәһе лә Майҡы бейгә тоташа. Табындарҙың хәҙерге вариҫтары Ғафури, Учалы, Ҡырмыҫҡалы, Архангель райондарында күпләп, Әбйәлил, Белорет, Дәүләкән райондарының ҡайһы бер ауылдарында йәшәй».*

*(Уҡыусы иншаһынан өҙөк).*

Ҡасандыр был урында артыҡ шыҡһыҙ ине. Красноусолдың үҙәге булһа ла, аңлата алмаҫлыҡ тойғолар уятыр ине был урам. Аҡыл яғынан зәғиф балаларҙың махсус мәктәбе урынлашҡайны унда. Әлеге балалар өсөн әсе һыҙланыу ҙа, киләсәк өсөн ауыр борсолоуҙар ҙа бар ине. Дөрөҫ, торғонлоҡ осоронда ла үҫеп килеүсе быуынға иғтибар һис тә кәмемәне кеүек. Ләкин бер үк ваҡытта ҡағыныр ҡанаттарға бейеклектәр, атыр сәскәләргә йылылыҡ етмәгән саҡтар ҙа булды.



Республикабыҙ үҙаллылыҡ алып, заманалар болғанышынан һуң әҙерәк һиллек урынлашҡас, асылыбыҙға ҡайтҡан осорҙа был урам да байрам төҫө алды.


*Дәриғәт Рәхимов*

«Үткән быуаттың 95-се йылдарында, иҫләһәгеҙ, халҡыбыҙ ныҡлы милли асылына ҡайта, онотолған йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр тергеҙелә башланы. I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы үтеп, унда төплө уйланылған, халҡыбыҙҙың артабанғы яҙмышын хәл итерҙәй ҡарарҙар ҡабул ителеүе һүнеп барған усаҡты яңынан тоҡандырып ебәргәндәй булды. Беҙ ҙә башҡорт зыялыларын тәрбиләп үҫтерерҙәй мәктәп асыу тураһында күптән хыяллана инек. Был хыялды тормошҡа ашырырға заман беҙгә ҡапҡа асты», — тип һөйләй Красноусол башҡорт гимназия-интернаты директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Дәриғәт Рәхимов.

Ул ҡапҡаның нисек асылғанын «асыусылар» ғына белә. Ғафури районында ниндәйҙер башҡорт мәктәбен асыу түгел, ауылдар араһында йүнле юл да юҡ ине әле. Мәктәптәрҙе тамамлаусыларҙың күбеһе, ниндәй генә һәйбәт уҡыуҙарына ҡарамаҫтан, ауылдан ситкә сығып китә алмай ыҙаланды. Форсаты ла булманы, мөмкинлеге лә самалы ине. Районда бер төркөм зыялылар, халҡыбыҙҙың киләсәге тип янып йөрөүселәр — Нияз Сәлимов, Заһира Ғәзизова, Дәриғәт Рәхимов, Рәмзиә Монасипова, Аман Юлъякшин, Илдар һәм Ғиндулла Шәйәхмәтовтар һәм башҡалар, бик күп ата-әсәләрҙең мөрәжәғәтен күҙ уңында тотоп, район үҙәгендә башҡорт мәктәбен асыу мәсьәләһен күтәреп сыҡты. Ҡаршы килеүселәр, милләтселектә ғәйепләүселәр әҙ булған тиһеңме ул осорҙа? Мәғариф министрлығы зыялыларҙың мөрәжәғәтен ишетте, башҡорт гимназияһы асыуға фатиха бирелде. Һәм 1996 йылда гимназия үҙенең ишектәрен асты. Аҡылға зәғиф балаларҙың махсус мәктәбе күрше ауылға күсерелеү сәбәпле, уларҙың ике ҡатлы бинаһында урынлашты гимназия.

«Башҡорт телендә төплө белем биргән, милләтенә һөйөү тәрбиәләгән, милли кадрҙар тимерлеге булған башҡорт гимназияһының кәрәклеген бөгөн бөтәһе лә аңлай. Ә ул ваҡытта? Башланған саҡта бөтөнләй база юҡ ине. Күҙ алдына килтерегеҙ әле, хатта нәфис әҙәбиәт тә юҡ, мебель, магнитофон кеүек йыһаздарҙы әйтәһе лә түгел. Ауылдан-ауылға йөрөп, өгөт-нәсихәт менән 140 бала йыйып ала алдыҡ, — тип иҫләй ул саҡтарҙы Дәриғәт Муллағәле улы. — Алға китеп шуны әйтәйем, бөгөн 380-дән артыҡ бала белем ала. Ә уҡырға теләүселәр шул тиклем күп, шуға күрә хатта һайлап алыу системаһы булдырырға мәжбүрбеҙ».

Бөгөн Красноусол үҙәген оло мәҙәниәт һарайы һәм өс ҡатлы заманса йыһазландырылған башҡорт гимназияһы бинаһы биҙәй. Ситтәрәк,

ҡасандыр район ҡунаҡханаһы тип иҫәпләнгән «шырпы ҡабы» ла күркәм төҫ алған. Баҡһаң, ул да хәҙер гимназияға ҡарай икән.

Үҙаллылыҡ мөмкинлектәр асҡас, ғафуриҙар ҙа, башҡа төбәктәр кеүек, икенсе һулыш кисерҙе. Ҡасандыр авария хәлендәге мәктәптәр һаны буйынса тәүге халыҡ шағирының яҡташтары беренсе урында килә ине. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтовтың ошо район буйынса Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайға депутат итеп һайланыуы оло бәхеткә әүерелде. Ысын мәғәнәһендә улар тормошона тылсымлы таяҡ тотҡан изге йән килеп инде. Һуңғы ун йыл эсендә генә районда тиҫтәнән ашыу яңы мәктәп асылды, мәҙәниәт усаҡтары ҡалҡып сыҡты, бөтә ауылдарға ла юл һалынды, асфальт түшәлде, күперҙәр барлыҡҡа килде. Артта һөйрәлеүсе райондар исемлегендә йөрөгән Ғафури яңы тормошҡа аяҡ баҫты.

«Гимназия асылғас та, бөгөн дә мин төп өс хәстәр менән янам, — тип һүҙен дауам итә гимназия директоры. — Беренсеһе, матди-техник база нығытыу. Уҡыу-тәрбиә өлкәһендә статусын гимназия тулыһынса аҡлап килһә лә, тәүҙә был өлкәлә күҙгә күренер уңыштар юҡ кеүек ине. 2003 йылда Премьер-министр Рафаэль Байдәүләтов беҙҙең уҡыу йорто менән ныҡлап танышып сыҡты ла, гимназия былай булмай ул, аҡыллы, һәләтле балалар заманса гимназияла уҡырға тейеш, тине. Уның ҡарары менән киләһе йылда уҡ гимназия-интернатыбыҙҙа төҙөкләндереү эштәре башланды. Бер йыл эсендә өр-яңы спорт залы төҙөлдө, иҫке бина, өсөнсө ҡат өҫтәлеп, бөтөнләй яңы төҫ алды. Һәр синыф бүлмәһе заманса йыһазландырылды, ике компьютер класы булдырылып, Интернетҡа тоташтырылды. Былар барыһы ла республика ҡаҙнаһынан эш-

*Яңы төҫ алған гимназияны*
*Премьер-министр Рафаэль Байдәүләтов үҙе килеп асты*





ләнелде, бөтәһе 42 миллион һум үҙләштерелде. 2005 йылда Премьер-министр үҙе килеп асты яңы төҫ алған гимназиябыҙҙы».

Элекке ҡунаҡхананың гимназияға тапшырылыуы ла ҙур ҡыуаныс. Район хакимиәте башлығы Әхәт Шәһиевтың аҡыллы сәйәсәте, булдыҡлы эшмәкәрлеге, халыҡ фекеренә ҡолаҡ һала белеүе емеше был. Ул ҡунаҡхана шәхси ҡулдарға күсеп бара ине улайһа. Ата-әсәләрҙең, уҡыусыларҙың был турала матбуғатта сығышы ла булған. Хакимиәт башлығы ҡарары менән бөгөн унда интернат, ашхана һәм башланғыс синыфтарҙың уҡыу кабинеттары урынлашҡан.

Икенсе хәстәрен директор, уҡыусы балаларҙы туплау мәсьәләһе, тип белдерҙе. Алда әйтеүенсә, был хәстәр хәҙер күпкә еңеләйҙе, әлбиттә, сөнки гимназияның абруйы бөгөнгө көндә районда ғына түгел, республикала ла ҙур. Өфө ҡалаһынан, алыҫ Себер яҡтарынан, сит өлкәләрҙән килеп уҡыусылар ҙа бар бында. Иң алдынғы, иң тәртипле һәм, иң мөһиме — районды, халкыбыҙҙың патриоттары булырҙай һәләтле балалар ғына һайлап алына. Был үҙен аҡлай ҙа, буғай, уңыштары шул турала һөйләй.

Өсөнсө хәстәр — педагогик коллектив туплау. Ул иң ауыр мәшәҡәттәрҙең береһе. Башҡорт милләтенән булған кадрҙар ҡасабала булмай сыға. Ауылдарҙан тәжрибәле, алдынғы ҡарашлы уҡытыусыларҙы һайлап алып саҡыралар ҙа, ә бында торлаҡ мәсьәләһе ҡалҡып сыға. Педагогик кадрҙар менән эшләү эҙмә-эҙлекле, системалы, даими эҙләнеүҙе талап итә шул. Ун йыл эсендә гимназияны 210 уҡыусы тамамлаһа һәм уларҙың 90 процентының юғары уҡыу йорттарында белем алыуын иҫәпкә алһаҡ, педагогик коллектив үҙ эшенә лайыҡлы һәм ышаныслы ҡарай, тип әйтергә булалыр.

Быйыл «Мәғариф» өҫтөнлөклө милли проект сиктәрендә конкурста ҡатнашып, Красноусол башҡорт гимназия-интернаты 1 миллион һум-

лыҡ грантҡа эйә булды. Был милли проект заманса йүнәлештә һәм һөҙөмтәле эшләгән белем биреү учреждениеларын асыҡлап ҡына ҡалмай, ә ундағы инновацион процестарҙы матди дәртләндереүҙе лә мөһим маҡсат итеп ҡуя. Проектҡа ярашлы, грантҡа дәғүә итеүсе мәктәптең белем сифаты күрһәткестәре юғары булыу мотлаҡ. Был тәңгәлдә башҡорт гимназия-интернатының һөҙөмтәләре тос, ғорурланырлыҡ уңыштары байтаҡ.

Педагогик коллектив буласаҡ милли кадрҙарға белем һәм тәрбиә биреү буйынса ҡуйылған дөйөм маҡсаттарҙан сығып, уҡыусыларҙы шәхес итеп тәрбиәләү, уҡытыу һәм үҫтереү юлдары проблемаһы өҫтөндә эшләй.

Белем биреүҙе модернизациялау шарттарында методик хеҙмәттең бөтә нигеҙе педагогик хеҙмәткәрҙәрҙең эш практикаһына педагогика, психология фәндәренең яңы асыштарын индереүгә йүнәлтелгән. Фәнни-теоретик, ғәмәли конференциялар һәм педсоветтар, семинар-практикумдар, конкурстар, тәрбиәсе һәм уҡытыусыларҙың ижади эштәре методик хеҙмәттең иң эффектлы формалары булып тора. Гимназия күп йылдар Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты менән хеҙмәттәшлек итә. «Һәләтле балаларҙы билдәләү һәм үҫтереү» үҙәге директоры, педагогия фәндәре кандидаты, доцент Ф.Р.Фәхретдинова етәкселегендә күп профилле гимназия-интернатта һәләтле балаларҙың интеллектуаль һәм ижади һәләттәрен үҫтереү буйынса эксперименталь майҙансыҡ булдырылған.

Коллектив һәләтле балалар менән эшләүҙе дөрөҫ йүнәлештә алып барыу, ойоштороу, һәләтлелекте диагностикалау буйынса махсус курстарҙа белемдәрен камиллаштырҙы, белем сифатының мониторингы һәм диагностикаһы, уҡыу процесына яңы технологиялар индереү буйынса эшләй. Район, республика кимәлендә эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыу традицияға әйләнде.



***

*«Мин укыған Красноусол башкорт гимназия-интернаты районыбыҙҙа «Йыл мәктәбе» исемен алды. Беҙҙең шатлығыбыҙҙың сиге булманы, сөнки был еңеүҙә беҙҙең дә бәләкәй генә булһа ла өлөшөбөҙ бар. Мәктәп ихатаһында беҙ үҫтергән сәскәләр әле лә күҙ яуын алып ултыра.*

*Мин үҙ илемдә башкорт кыҙы булып тыуғаныма ғорурланам! Әлдә ошо гимназияла укыйым: йыр, бейеү, укыу түңәрәктәренә йөрөйөм тип шатланам. Тыуған башкорт илемә, халкыма хеҙмәт итерҙәй, укымышлы, белемле кеше булырға теләйем мин. Әсәйемде, туғандарымды, халкымды, Башкортостанымды яраткан башкорт кыҙымын мин!»*

*(Укыусы иншаһынан өҙөк).*

Гимназияның республика кимәлендә төрлө конкурстарҙа призлы урын яулауы, уҡыусыларҙың район һәм республика олимпиадаларында уңышлы сығыш яһауы — педагогик коллективтың ижади үҫеш кимәле күрһәткесе. 2005 йылда «Рәсәйҙең иң яҡшы мәктәптәре» конкурсының «Мәктәптәрҙең мәктәбе» номинацияһында республика кимәлендә 1-се урын яулау, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара «Йыл уҡытыусыһы — 2005» конкурсында — гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлсәсәк Мөхәмәт ҡыҙы Кинйәбаеваның, «Йыл уҡытыусыһы — 2006»ла математика уҡытыусыһы Рәйсә Рәшит ҡыҙы Урманшинаның лауреат исемдәренә лайыҡ булыуы ошо хаҡта һөйләй.

«Район, республика олимпиадаларында ҡатнашып, 46 призлы урын яулауға өлгәште гимназистарыбыҙ. Башҡорт һәм рус теле, биология, химия, география, математика, черчение, физика, инглиз теле буйынса район олимпиадаларында 1-се урынға лайыҡ булдылар. Быйыл республика буйынса химиянан ауыл мәктәптәре араһында — 1-се урын, биологиянан — 2-се, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән — 3-сө, инглиз теленән 10-сы урынды яуланылар. Уҡыусыларыбыҙҙың төрлө кимәлдәге конкурс-олимпиадаларҙа, ярыштарҙа өлгәшкән уңыштарын һанап сығыу мөмкин дә түгел, улар бихисап. Уҙған уҡыу йылын 357 уҡыусының 231-е «4» һәм «5» билдәләренә тамамланы. Йыл йомғаҡтары буйынса, өлгөрөш — 100 процент, белем сифаты 71 процент», — тип һөйләй директорҙың уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары Рәмзиә Ғайса ҡыҙы Монасипова.

Химия, физика, математика буйынса Берҙәм дәүләт имтихандарында (БДИ) уҡыусыларҙың белем сифаты 90—100 процент тәшкил иткән. Юғары уҡыу йорттарына имтихандарҙы уңышлы тапшырып, йыл һайын 80—90 проценты студент булыу бәхетенә ирешә. Химиянан БДИ буйынса 100 балл йыйып, быйылғы сығарылыштан Илгиз Вәлиев ошо уҡ һөҙөмтәләр менән Өфө дәүләт нефть техник университеты студенты булды. Алик Хөснөтдинов 88 балл йыйҙы. Физика буйынса БДИнан Ринат Гәрәев сағыштырмаса юғары — 73 балл йыйҙы, Илгиз Вәлиев — 77 балл, Фәнил Мөхәмәтйәнов — 76 балл.

1999 йылдан алып 45 уҡыусы — көмөш, 5 уҡыусы алтын миҙалға эйә булһа, быйылғы сығарылыштан 33 уҡыусының 4-һе — алтын, 7-һе көмөш миҙал менән бүләкләнде. 26 уҡыусы (79 процент, шул иҫәптән

миҙалсылар ҙа) ҡабул итеү имтихандарын уңышлы тапшырып, юғары уҡыу йорттарына инеп, белемдәренең ысынлап та тәрән икәнлеген күрһәтте. Инновацион уҡыу йорто булараҡ, уҙған йылдан профилле уҡытыуға күселде. Уҡытыу физика-математика, биология-химия, социаль-гуманитар профилдәр буйынса алып барыла. Ижади эшләүсе уҡытыусы һәләтле баланы күрә һәм үҫтерә ала. Йыл һайын гимназияның 10—15 уҡыусыһы республика уҡыусыларының фәнни-ғәмәли конференцияларында ҡатнашып, докладтар менән сығыш яһап, призлы урындар ала.

«Гимназиябыҙ — бәхетле бала саҡ иле ул. Гөл-сәскәгә күмелгән яҡты, заманса синыф бүлмәләре, мәктәп яны участкаһы — былар бөтәһе лә уҡыусыларҙа гимназияға һөйөү, тирә-яҡҡа һаҡсыл ҡараш тәрбиәләй. Беҙ ихтирамлы, иғтибарлы, аңлы ата-әсәләребеҙ, итәғәтле, тәрбиәле уҡыусыларыбыҙ, профессиональ белемле, ижади эшләүсе, егәрле уҡытыусы-тәрбиәселәребеҙ менән көслөбөҙ. Гимназиябыҙҙың яҡты биттәрен, тарихын улар яҙа», — тип һүҙен тамамланы Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Рәмзиә Ғайса ҡыҙы.

***

*«Яңы бешкән икмәк тотоп,*
*Мин өйгә кайтып киләм,*
*Иң кәҙерле аҙык бит ул,*
*Үҫкәнмен инде, беләм!*

*Икмәкһеҙ кеше йәшәй алмай. Ул иң кәҙерле аҙык. Икмәк — бөтәһенә лә баш. Икмәктең валсығын да әрәм итергә ярамай. Юлда аяк аҫтында ятkан икмәкте күреп калһаң, уны алып йә бағана башына, йә кеше аяғы баҫмаған ергә һалырға кәрәк.*

*Икмәкте үҫтереүе бик кыйын. Тәүҙә ерҙе эшкәртәләр, сәсәләр, утайҙар, ашлама һибәләр, ә көҙ еткәс, уңышты юғалтыуһыҙ йыйып алырға тырышалар.*

*Игенсенең хеҙмәте иртә яҙҙан кара көҙгәсә дауам итә. Күпме һөнәр эйәләренең көсө һалынған был икмәккә!*

*Икмәкте хөрмәт ит, уны тәләфләмә!»*

*(Укыусы иншаһынан өҙөк).*

Тәрбиәүи эш гимназия-интернаттың уҡытыу программаһын тулыландырып, алға ҡуйылған төп мәсьәлә — халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, традицияларын, мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереүгә булышлыҡ итә, уҡыусыларҙың эске культураһын, рухын үҫтерә. Тәрбиә эше дәрес ваҡытында ла, унан һуң да бара, түңәрәк, секция, махсус курстар эшләй. Йөкмәткеһе буйынса улар музыкаль, спорт-һауыҡтырыу, интеллектуаль эшмәкәрлек һәм башҡа йүнәлештә алып барыла.

Уҡыу йортоноң уңышлы үҫешен ата-әсәләр ярҙамынан тыш күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Шулай уҡ гимназия попечителдәр советы (рәйесе — Ф.Х.Мәжитов) һәм ата-әсәләр комитеты менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Уҡыу йортоноң матди-техник базаһын нығытыуҙа ла ата-әсәләрҙең хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ.



”Һоло бирһәң, ат та шәп атлай”, ти мәҡәл. Гимназияла балаларҙы дәртләндереү системаһы булдырылған. Төрлө критерийҙар, әйтәйек, уҡыу, тәртип, хеҙмәт, таҙалыҡ, олимпиада, бәйгеләр һөҙөмтәһе һәм башҡалар буйынса синыфтар араһында аҙна һайын ярыш бара. Йыл аҙағында иң күп балл йыйған синыф еңеүсе тип билдәләнә һәм путевка менән бүләкләнә. Үткән йылдарҙа еңеүселәр Өфө ҡалаһына, данлыҡлы Шүлгәнташ мәмерйәһенә, донъя ҡомартҡыһы Арҡайым ҡаласығына, Салауат районына, Нөгөш һыуһаҡлағысына сәйәхәт ҡылған. Гимназия «Родина» агрофирмаһы менән килешеү төҙөп, 20 гектар ерҙә сөгөлдөр эшкәртә икән. Унда йәйгеһен хеҙмәт һәм ял лагеры ла ойошторола. Әйтеүҙәренә ҡарағанда, балалар бик ихлас йөрөй. Беренсенән, улар ер эшен белеп үҫһә, көҙөн-ҡышын үҙ хеҙмәттәренең емешен татып ҡыуана. Шәкәр ҡомон һатҡас, аҡса гимназияның махсус иҫәбенә күсерелә. Эшләмәҫлек тә түгел шул, йыл һайын гимназия 200—300 мең һум табыш ала. Был сумма синыфтан тыш сараларға, уҡыу алдынғыларына, төрлө бәйге еңеүселәренә премия биреүгә лә китә. «Беҙҙә балалар бигерәк тә Яңы йыл байрамын көтөп ала, — тип һөйләй директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Нәфисә Әминева. — Директорҙың ҡарары менән был байрамға балалар үҙҙәре эшләп тапҡан аҡсаға затлы бүләктәр алына. Бик күп бәйгеләр, смотрҙар, тантаналы саралар үтә. Балаларға бөтә һәләттәрен аса алыу мөмкинлеге тыуа. Ғөмүмән, беҙҙә ауыл мәктәптәренән айырмалы рәүештә, балалар бер генә минут та буш тормай. Дәрестәр бөткәс тә, улар эшләп килгән дүрт тиҫтәнән ашыу түңәрәккә йүгерә. Уларҙың егермегә яҡыны предмет түңәрәктәре, музыка-хореография түңәрәктәре генә тиҫтәнән ашыу. Алик Шәмситов етәкләгән «Быҙыбыт» бейеү ансамбле һәм «Айҙарман» вокаль ансамблдәре республика конкурстарында еңеүҙәр яулай. Уларҙың сығыштарын район халҡы ла көтөп ала. «Оҫта ҡулдар», «Эрудит», «Өмөтлө ҡәләм»дәрҙең дә уңыштары бихисап. Милли көрәш буйынса, уҡып, ишетеп беләһегеҙҙер, Альфред Мәүлетҡоловтың тәрбиәләнеүселәре республика күләмендә ышаныслы майҙан тота. Гимназияның һәйбәт рухи-психологик мөхите булыуы балаларҙың һәләттәрен асыуға ярҙам итә лә».

***

«Мәғариф» өҫтөнлөклө милли проект сиктәрендә «Алдынғы уҡытыусыларҙы дәртләндереү» йүнәлеше буйынса Ғафури районынан 5 уҡытыусы еңеп сыҡты. Уларҙың икәүһе Красноусол башҡорт гимназияһынан: 35 йыл хеҙмәт стажлы, юғары категориялы биология уҡытыусыһы Миңлесара Зәйнетдин ҡыҙы Шәрипова һәм 30 йыл хеҙмәт стажлы, юғары категориялы химия уҡытыусыһы Зәйтүнә Хәмзә ҡыҙы Шириязданова. «Абруйлы уҡытыусыларыбыҙҙың РФ Президенты грантына эйә булыуҙары — беҙҙең оло еңеү ул. Улар быға бик тә лайыҡ. Уҡытыусыларыбыҙҙың емешле эшмәкәрлектәренә, туҡтауһыҙ эҙләнеүҙәренә һоҡланам. Ҡыҙыҡ өсөн, еңеүселәр исемлеге менән танышып сыҡтым һәм шундай ҡыуаныслы һығымтаға килдем: районда араһында ике уҡытыусы лайыҡ булған бер генә гимназия-мәктәп тә юҡ. Был да күп нәмә тураһында һөйләй бит», — ти коллегаларының еңеүҙәренә ҡыуанып, гимназия директоры Дәриғәт Рәхимов.

Миңлесара Шәрипова үҙ эшенең оҫтаһы. «Уҡытыусы һөнәренең абруйы яңынан артыуы һөйөндөрә. Илебеҙ ниндәй генә боролоштар кисереп, беҙҙең һөнәргә ниндәй генә ҡараш булмаһын, Уҡытыусы тигән бөйөк исемде һәр саҡ юғары тоторға тырыштым», — ти мөғәллимә. Камил Сиразетдинов, Зилиә Харисова, Бөрө дәүләт педагогия институтының биология факультеты уҡытыусылары — остаздарының төплө белем менән бергә һөнәрҙәренә тоғролоҡ һәм мөхәббәт тәрбиәләгәндәре өсөн рәхмәтле ул. Хеҙмәтен яратҡан, кешеләрҙе аңлай белгән, уҡыусыларҙы үҙ балалары кеүек яҡын күргән, күршеләре менән татыу йәшәгән, үҫемлектәр, ҡош-йәнлектәр, ғөмүмән, бар тәбиғәт телен аңлаған әҙәменә Хоҙай үҙе сәскә тоттора шул.

Һәр уҡыусы — шәхес. Ижади шәхес. Уның ҡулына китап биргәнһең икән, һин уның киләсәге өсөн дә яуаплы. Уҡыусыла предметыңа

*РФ Президенты грантына эйә булыусы Ғафури районы укытыусылары: (һулдан уңға) Рәмзилә Юнысова, Миңлесара Шәрипова, Надежда Терехова, Зәйтүнә Шириязданова, Гүзәл Латипова*



ҡыҙыҡһыныу уята белеү — тәбиғәт биргән һәләт, төн йоҡоңдо ҡалдырып, эшләр эшеңде ситкә ҡуйып эҙләнеү, тир түгеү ул. «Камиллыҡтың сиге юҡ, замандан һис ҡасан артта ҡалырға ярамай» — бына уңыштың сере нимәлә.

Һуңғы йылдарҙағы ҡаҙаныштары ла хайран итерлек шул уҡытыусының. 2004 йылда Миңлесара Шәрипова етәкләгән биологтар командаһы ауыл мәктәптәре араһында республикала беренсе урын яулай, ә быйыл — икенсе. Алик Хөснөтдинов менән Алмаз Сәфиуллин биология буйынса, республикала призлы урындар яулап, Ырымбурҙа Рәсәй олимпиадаһында ҡатнашып, дүрт тиҫтәнән ашыу дәғүәсе араһынан 12-се һәм 14-се урындарҙы ала. Алмаз икенсе йылына Киров ҡалаһында Башҡортостан намыҫын яҡлай. Биология фәне буйынса имтихандарҙы уңышлы тапшырып, юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүселәр күп. Мәҫәлән, Бөрө дәүләт педагогия институтының биология факультетын тамамлаған Лилиә Дилмөхәмәтова Мәскәү юғары уҡыу йорттарының береһенә аспирантураға уҡырға ингән. Светлана Йыһаншина БДМУ-ның генетика факультетында тик биш билдәләренә генә уҡый, Ләйсән Сиразетдинова, Фирүзә Фәхретдинова БДУ-ның биология факультетында алдынғылар иҫәбендә.

Бөтә бәхетлеләр бер-береһенә оҡшаш ул, тип әйткән аҡыл эйәһе. Зәйтүнә Шириязданова ла, еңеүсе коллегаһы кеүек үк, бигерәк мөләйем, ихлас, тормошто, балаларҙы яратҡан гүзәл зат икән. «Гимназияла балалар төплө белем алһын өсөн етәкселек бөтә шарттар ҙа булдырырға тырыша, шуға уҡытыусыларға ла эшләүе еңел. Бала саҡта табип булырға хыялланғайным, яҙмыш химия уҡытыусыһы итте, үкенмәйем. Эшемә дәртләнеп киләм һәм уҡыусыларҙың да мине һағынып көтөүен тоям», — ти ул. Химия тәү ҡарашҡа ауыр фән, әммә бөгөнгө тормошҡа бәйләп алып барғанда балаларҙың был предметҡа шул тиклем ҡыҙыҡһыныуы арта. Уларҙың һорауҙары күбәйә, шуға бергәләп өҫтәлмә әсбаптар менән йыш шөғөлләнәләр улар. Уҡыусыларын үҙенә тиң итеп күрә белә уҡытыусы. «Уларҙың күңелендә эйәрле-йүгәнле ат ята, ана шул серҙе, камиллыҡты асҡан һайын, улар һиңә нығыраҡ һыйына», — тип йылмая Зәйтүнә Хәмзә ҡыҙы.

Өс йыл эсендә утыҙлап уҡыусы медицина, аграр, нефть техник университеттарында химияға бәйле факультеттарҙы һайлаған икән, бында уҡытыусының хеҙмәте ҙур. 2002, 2004, 2006 йылдарҙа химия буйынса республика олимпиадаһында ауыл мәктәптәре араһында Ринат Шәрипов, Илгиз Вәлиев, Ләйсән Абдрахмановалар беренсе урынды яулай. БДУ-ның химия факультетында әле биш уҡыусы белем ала. Алда әйтеүебеҙсә, Берҙәм дәүләт имтиханында химия буйынса Илгиз Вәлиев 100 балл йыйып, Өфө дәүләт нефть техник университетына уҡырға ингән. Район олимпиадаларында Миңлесара Шәрипованың да, Зәйтүнә Шириязданованың да уҡыусылары йыл да призлы урындар яулай.

Бар ғүмерҙәрен мөғәллимлеккә арнаған абруйлы уҡытыусылар үҙ эштәренән йәм дә, тәм дә таба, бейеклеккә күтәрелер ҡошсоҡтарына һынмаҫ ҡанаттар ҙа ҡуя белә.

*Наил ЛАТИПОВ фотолары.*